# Олотау хәбәрҙәре

0+

№ 1
сентябрь, 2018 йыл

Ишмырҙа мәктәбенең балалар һәм үҫмерҙәр гәзите


**Ҡәҙерле балалар, хөрмәтле коллегалар, ата-әсәләр!**

*Беҙҙең мәктәптә «Олотау хәбәрҙәре» тип аталған мәктәп гәзите сыға башланы. Һеҙ уның беренсе сығарылыш номерын уҡыйһығыҙ. Был гәзит һеҙҙең өсөн һәм һеҙҙең тураһында. Ул мәктәп хаҡында. Гәзит өҫтөндә эшләгән уҡыусыларҙың, ошо көнгә тиклем был өлкәлә тәжрибәләре юк ине. Ләкин шуныһы ҡыуаныслы: балалар дәртләнеп, ең һыҙғанып эшкә тотондолар, һәм улар гәзитте бөтә яҡтан ҡыҙыҡлы, мәғлүмәтле, файҙалы итеп эшләргә тырыштылар.*

*Мәктәп гәзитенең сығыуы уҡыусылар, уҡытыусылар, ата-әсәләр берләшмәһен тағы ла нығырак берләштереп, беҙҙең мәктәбебҙҙең изге традицияһына әйләнер, тигән ышанста ҡалам.*

*Барығыҙҙы ла мәктәптең беренсе сығарылыш номеры менән ҡотлайым һәм яңы асыштар, ижади уңыштар теләйем!*

**Мәктәп директоры Монасипов И.М.**




## Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы

*1 сентябрь*

*Бына йәмле йәй айҙарыла үтеп китте. Беҙ күс, дәрт, алып яңынан үҙ мәктәбебеҙгә ашыҡтыҡ.*

*Ел ҡыңғырау, ел ҡыңғырау,*

*Дуҫымдай күрәм һине*

*Мәктәбемә тәүге тапҡыр*

*Һин бит саҡырҙың мине.*

*9 сентябрь*

*Ишмырҙа ауылында Башкортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Королтайға алтынсы сакырылыш депутаттарын һайлау көнө үтте.*

*26 сентябрь*

*“Киске Өфө» газетаһының баш мөхәррире Янбаева Г.Г. менән осрашыу үтте.*

*11 октябрь Республика көнөнә мәктәптә бик күп саралар уҙғарылды.*

*27 сентябрь*

*Ишмырҙа ауылы мәктәбендә Башкортостандың халыҡ шағиры - Абдулхаҡ Игебаев иҫтәлегенә хәтер көнө үтте. Бәрәкәтле Баймак ерендә тыуып-үҫкән талант эйәләре хаҡында белмәү, уларҙы иҫкә алыу мөмкин түгел.*

*. 15 сентябрь көнө сәғәт 10.00 Ишмырҙа төп дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусылары һәм коллективы Бөтә донъя таҙалыҡ көнөнә арналған экологик өмәлә ҡатнашты..*

Олотау хәбәрҙәре

# Йәш хәбәрселәр рубрикаһы

**1 сентябрь тулҡынландырғыс көн.**

*Сөнки алда яңы белем үрҙәре көтә, яңынан дуҫтар менән осрашыу көндәре. Байрам тантаналы рәүештә үтте. Мәктәп тураһында шиғырҙар, йырҙар яңғыраны. Быйылғы уҡыу йылында 8 уҡыусы мәктәпкә тәүге тапҡыр аяҡ баҫты. Беренселәрҙең матур сығышынан һуң, уларҙы мәктәп директоры Монасипов Иҙел Мөхтәр улы ҡотлап, матур теләктәрен әйтеп үтте. Шулай уҡ ҡотлауҙарға Ишмырҙа ауылы биләмәһе башлығы Исҡужин Рөстәм Миҙхәт улы һәм Баймаҡ районы администрацияһы вәкиле Рәхимғолов Ринат Венер улы ҡушылды. Тәбрик һүҙҙәренән һуң беренсе кластарға бүләктәр тапшырылып үтелде. Байрам бай тәьсораттар ҡалдырҙы.*






**Эй, мәктәбем белем усағы**

**Һин ғүмерҙең, иң гүзәл сағы!**

# Олотау хәбәрҙәре

*Ишмырҙа ауылында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға алтынсы саҡырылыш депутаттарын һайлау көнө үтте.*

*Ауыл мәҙәниәт йортонда яҙыусы Гөлфиә Юнисованың ижадына арналған әҙәби-музыкаль композиция күрһәтелде. Һайлау пунктында уҡыусылар, ата-әсәләр һәм ауыл халкы менән берлектә йәрминкә ойошторолдо, буфет эшләне. Уҡыусылар, урындағы ауыл һәүәҫкәрҙәре тарафынан концерт программаһы күрһәтелде.*

*Ауыл мәктәбендә "Асыҡ ишектәр көнө" сараһы ойошторолдо. Ата-әсәләр йыйылышы, спорт ярыштары: күңелле старттар, шашки, волейбол, теннис, иң мәргән уксы бәйгеһе барыһының да күңеленә хуш килде. Иң кыуаныслы ваҡиға булып, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға алтынсы сакырылыш депутаты кандидаты – Р.Б. Аблаевтың килеп, укыусылар һәм ауыл халкы менән осрашып китеүе булды. Сара укыусыларҙың, йәштәрҙең флешмобы менән тамамланды.*



# Олотау хәбәрҙәре



8 октябрҙән 13 октябрҙә тиклем, Ишмырҙа ауылы мәктәбендә, Республикабыҙҙың тыуған көнөнә ҡарата арналған саралар үтте. «Башҡортостан – тыуған илем!» темаһына инша яҙыу конкурсы булды.

Уҡыусылар тыуған иленә һөйөүен, әсә телен ҡәҙерләүҙәрен һәм ғәзиз еренә ғашиҡ булып йәшәүҙәрен иншаларында сығылдырҙылар.

«Республикам – алтын бишегем!» тигән темаға плакаттар конкурсы булды.

Башланғыс класс уҡыусылары әүҙем ҡатнаштылар. Һүрәттәрендә Башҡортостан республикаһының флагы, гербы һәм тәбиғәте төшөрөлдө.

«Иле барҙың – теле бар» шиғыр ятлау конкурсы булды. Мәктәп эсендә үткән ярышта еңеүселәр район үҙәгенә ебәреләсәктәр.

“Сәскә ат, тыуған илем!” исемле тематик линейка үтте. “Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө” нә ҡарата класс сәғәттәре үтте.

10 октябрь көнө ауылыбыҙҙың үҙәк майҙанында үткән йәрминкәлә, мәктәп уҡыусылары зур теләк белдереп әүҙем ҡатнаштылар. Мауыҡтырғыс спорт ярыштары, халыҡ тарафынан үткәрелгән байрам концерты йәше - ҡартының күңеленә хуш килде.

26 сентябрь «Киске Өфө» газетаһының баш мөхәррире Г. Янбаева менән осрашыуҙы түҙемһеҙлек менән көттөк. Был газетаның әһәмиәте баһалып бөткөһөҙ. Ундағы төрлө рубрикалар беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле. Телде, мәҙәниәтте, үҫтереү буйынса бик күп материалдар бар. Осрашыуға күрше ауылдың ағинәйҙәре лә килгәйне. Беҙ ҙә ҡунаҡтар алдында концерт номерҙары менән сығыш яһаныҡ. Байрамда газетаға яҙылыу ойошторолдо. Күп кенә ауылдаштарыбыҙ “Киске Өфө” газетаһына яҙылды.



Мөхәррир – Йәйләева Ғәрифә Шәйәхмәт ҡыҙы